*Римма ЙӘРМӨХӘМӘТОВА,*
*Сибай сәнғәт училищеһының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса директор урынбаҫары*



# ЗАМАНҒА АУАЗДАШ



*Был донъяға ниҙәр булған икән — ошондай һорау ҡуя режиссер Сәлихйән Әфләтунов ҡуйған спектаклдәрҙә. Халыҡтың аңын уятырға, уйландырырға, ҡыҫҡартергә, ҡыҙыҡһырға тырыша. Ғөмүмән, театр донъяһында бөгөнгө заманға ауаздаш, күңелдәрҙе һыҙлатып торған һорауҙарҙа яуап рәүешендә бер-бер артлы ҡуйылған спектаклдәр тормошобоҙҙоң көҙгөһө булып тора. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, А.Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт драма театры режиссеры Сәлихйән Әфләтунов ҡуйған спектаклдәрҙең төп фекере заман, йәшәйеш хаҡындағы уйҙарҙан ғибәрәт.*

Кинйә улы Тимербулатын етәкләп, уның менән ниҙер һөйләшә-һөйләшә көн дә иртәнсәк эшкә барған сағында осратам мин режиссерҙы. Таң һарыһынан аталы-уллы ниҙәр хаҡында һөйләшәләр икән? Ҡыҙыҡ. Йә булмаһа, ҡыҙыу-ҡыҙыу атлап, киң йылмайып, ҡул биреп уҙа. Ҡайһы саҡ уйланып, бөтөнләй күрмәй үтеп китә. Ижад кешеһенә генә хас һыҙаттыр улар.

Сәлихйәнде мин ата-әсәһе яратып ҡушҡан Муллайән тигән исеме буйынса лә беләм. Баймаҡ районының Ишмырҙа ауылынан ул. Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡырға инеүселәр араһында баймаҡтар күберәк ине. Аҙаҡ Сибай башҡорт дәүләт драма театрында Рәдиф Яныбаев, Әсғәт Йәнбәков, Рәмзиә Ҡудашева, Сәлихйән Әфләтунов һәм мин бер мәлдәрәк эш башланыҡ. Әлбиттә, ижади яҙмыш һәр ҡайһыбыҙ алдына төрлөсә талаптар ҡуйҙы. Сәлихйәнебеҙ, артист һөнәрендә туҡталып ҡалмай, тағы ла юғарыраҡ, ҡатмарлыраҡ баҫҡысҡа үрләне. Ижади үҫешендә оло һынау тотоп, режиссер булып эшләй башлауына байтаҡ ваҡыт үтеп тә китте. Сибай башҡорт дәүләт драма театрына беренсе тапҡыр аяҡ баҫҡандан алып ижади уңыштар яулай ул. «Тәүге ролем, — тип хәтерләй ул, — Рафаэль Сафиндың «Тилекәй» драмаһында Туләкәй образы». Театрҙа эшләүҙең тәүге йылында уҡ төп роль уйнау — актер өсөн ҙур уңыш. Бик ихлас яратып башҡарҙы ул тәүге ролен. Профессиональ сәхнәлә беренсе режиссер Ким Нәҙершинды, ярҙам ҡулы һуҙыусы, кәңәшсе һәм ижади таяныс булыусы театр сәнғәте оҫталары Хәмзә Ҡурсаев, Рәзинә Ҡаһарманова, Закирйән Ханов, Шәмсинур Сиражетдинова, Рәмилә Хоҙайғоловаларҙы әле лә онотмай.

Артабанғы драматик ролдәре: Ф.Богдановтың «Иртәнге томан»ында — Кинйә, Әсғәт Мирзаһитовтың «Әсәләр көтәләр улдарын»да — Яхъя, Т.Миңнуллиндың «Үҙебеҙ һайлаған яҙмыш»ында — Рәмил, Ғ.Әхмәтшиндың «Ялҡын» драмаһында Бирҙеғол һәм башҡа образдар. Бөтәһе илһләп роль.

Актер кешегә үҙ һәләтен тулыһынса асыу өсөн төрлө пландағы ролдәр бирелә. Әйтәйек, Р.Хәмиттең «Китәм инде» драмаһындағы Инзар роле. Ул образ характерындағы эске һәм тышҡы ҡапма-ҡаршылыҡтар, ҡараш,

холоҡ-фиғел тулыһынса асылып, авторҙың һәм режиссерҙың тамашасыға әйтер төп фекерен ҡәүәтләй һәм башҡа образдарға ярҙам итә. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, театр сәнғәте серҙәрен өйрәтеүсе уҡытыусыбыҙ, Сибай театрының режиссеры Р.М.Әйүповтың эше ине. Ул ваҡытта беҙҙең ижади үҫешебеҙгә йүнәлеш, баһа биреүсе һәм оло таянысыбыҙ булған Рафаэль Мөхәмәт улының Өфө дәүләт сәнғәт институтының театр факультетын тамамлап ҡайтҡан йәш актерҙарға ярҙамы әйтеп бөткөһөҙ ҙур булды. Ғүмеренең һуңғы сәғәтенә тиклем ул үҙен йәлләмәйенсә театр тип янды, уҡыусыларына ышанып йәшәне. Бик күптәребеҙ унының ышанысын аҡланы. Шуларҙың береһе Сәлихйән Әфләтунов актер булараҡ та, режиссер булараҡ та ижад өсөн яныусы, төрлө хәл-ваҡиғаларҙа ысын кеше булып ҡалыусы, халҡы күңелендә иман байлығы таратыусы шәхес булып йәшәй. Ролдән-ролгә, спектаклдән-спектаклгә үҫте ул. Ижад иткән образдары төптән уйланылған, тамашасы күңеленә һеңеп ҡалырлыҡ итеп башҡарыла. Мәҫәлән, М.Буранғоловтың «Башҡорт туйы»нда — Тимеркәй, Й.Йомағоловтың «Семәрле тәхет»ендә — Ишем, Н.Асанбайҙың «Өҙөлгән өмөт»ендә — Рәмил, «Хәйбүш түрә, бисәһе Мәстүрә» комедияһында Ишкилде образдары.

Актер оҫталығы, талантҡа ҡушылған эшһөйәрлеге Сәлихйәндә спектаклде сәхнәләштереп ҡарау теләге уята һәм ул Мәскәүҙәге режиссерҙар әҙерләү бүлеген тамамлап ҡайта. Иң беренсе эше — Н.Ғәйетбаевтың «Тойғолар ниңә һүнә?» драмаһы. Унан һуң Н.В.Гоголдең «Өйләнеү» әҫәренә тотона. Ғ.Байбуриндың «Һағышлы мөхәббәт» трагикомедияһы ла уңышлы ҡабул ителә. А.Островскийҙың «Берәү бөлә — берәү көлә» («Банкрот») комедияһы тамашасылар тарафынан йылы ҡаршылана.

Яуланған үрҙәр байтаҡ. Һәр спектакль йөрәк ярып сыҡҡан бала һымаҡ ҡәҙерле уға. Ҡол-Дәүләттең «Тышаулы өйөр», Т.Миңнуллиндың «Мәҙинә», Г.Әхмәтҡужинаның «Абыстай», Ф.Бүләковтың «Таштуғай», Ә.Вәлиевтың «Йома» драмалары...Ҡайһы ғына спектаклде алып ҡарама, улар тәрән психологик алымдар менән асылған, һәр ҡайһыны тетрәндерә, уйландыра тамашасыны. Юҡҡа ғынамы ни театрҙы рухи таҙарыныу донъяһы менән сағыштыралар. Тимәк, театр менән тамашасы араһында бәйләнеш булдырылған. Ә был режиссер өсөн иң мөһиме. Айырыуса «Абыстай» драмаһын Сәлихйән Әфләтунов ҙур таҫыллыҡ, егәрлелек, тәүәккәллек менән ҡуйҙы.

Ниндәй генә жанрға тотонмаһын, иң һыҙғанып, «йөҙөп» эшләргә ярата ул. Ижади уңышы — режиссерҙың үҙенә ҡарата талапсан, тынһыҒыҙ булыуында, эште дөрөҫ, тос, йөкмәткеле итеп ойоштора белеүендә, актерҙар менән нескә психолог булараҡ аралашыуында.

Әминә Яхинаның «Ҡайырылмаһын ҡанаттар» әҫәренә иғтибар итеүе режиссерҙың күңелен күптән өйкәп йөрөгән проблеманы күтәрә. Йәш ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөрәк ярып сыҡҡан балаһынан баш тартыуы ни сәбәптән килеп сығыуы, йәмғиәттең ни өсөн төп бурысынан тайпыла барыуы хаҡында. Йәш актерҙар А.Ҡотошов, Ә.Ғәлләмова, М.Әхмәҙиевалар спектаклдең фекерен тулыһынса асыуға тос өлөш индергәндәр.

С.Әфләтуновтың өр-яңы ижад эштәренең береһе, күптән түгел шаулап-гөрләп аншлаг менән үткән премьераһы, һәләтле драматург Таңсулпан Ғарипованың «Бәхеткә ҡасҡандар» әҫәре. Тәү ҡарауға ябай ғына тема: «Нимә ул бәхет?» Автор һәм режиссер ошо һорауҙы ҡуя. Бурысмы алдан, мөхәббәтме? Кеше бәхетте нимәлә күрә?

Төп героиня Мөғлифә (Р.Хоҙайғолова — Башҡортостандың халыҡ артисткаһы) ғүмере буйы мөхәбәттән баш тартып, бурыс үтәп йәшәгән. Ә герой Баязит (Башҡортостандың халыҡ артисы М.Ниғмәтуллин) киреһенсә, мөхәбәткә генә табынған. Ғаиләһеҙ, яңғыҙлыкта йәшәй ғүмер буйы. Ниндәй төшөнсә өҫтөнлөк ала? Ҡайһыһы дөрөҫ йәшәгән? Ә бит бөйөк рус яҙыусыһының «Мөхәббәт бөтә донъяны ҡотҡарыр» тигән һүҙҙәре бар. Философик дилемма. Автор һәм художниктың (Э.Ғиззәтуллин), режиссерҙың фекерҙәре тап килеүе спектаклдең төп уңыштарының береһелер. Был философик уйланыуға ҡоролған спектакль тураһында әле күп яҙырҙар, әммә бөгөн шуныһы ҡыуаныслы: республикабыҙҙа бөгөнгө аң юғарылығынан тороп яҙылған ҡатмарлы фәлсәфәүи әҫәрҙәре лә сәхнәләштерерлек һәм еренә еткерерлек ҡыйыу һәм талантлы режиссер бар.